**Аңлатма яҙыу**

Уҡыу предметының дөйөм характеристикаһы

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-се класы өсөн башҡорт теленән эш программаһы төҙөгәндә дөйөм белем биреүҙең яңы федераль дәүләт стандарттары, федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла:
Мәғариф министрлығының 1089-сы номерлы 5.03.2004 йылғы ”Дәүләт белем биреү стандарттарының федераль компоненттарын раҫлау тураһында ”Законы;
«Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы;
Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы;
«Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» законы;
Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы;
15-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе муниципаль автономиялы дөйөм белем биреү учреждениеһының «Уҡыу планы»;
15-се урта дөйөм белем биреү мәктәбенең эш программаларының төҙөлөшөн һәм уға талаптарҙы билдәләүсе локаль акты.

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-се класы өсөн башҡорт теленән эш программаһы.

Эш программаһы 70 сәғәткә бүленгән (аҙнаға 2 сәғәт).

**Төҙөүсеһе:**

**Дәреслек:**М.Ғ.Усманова,З.М.Ғәбитова. Башҡорт теле: Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-се класы уҡыусылары өсөн дәреслек. – Өфө : Китап, 2013.

**Программа кимәле :** базислы

**Уҡытыусының тел буйынса уҡыу- уҡытыу методик комплекты:** З.М.Ғәбитова, Х.А.Толомбаев.Урыҫ мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыуҙы ойоштороу буйынса методик кәңәштәр.Өфө – 2006.

М.Ғ.Усманова, З.М.Ғәбитова. Башҡорт теленән диктанттар һәм изложениелар йыйынтығы. Өфө, « Китап», 2009.

**Уҡыусылар өсөн тел буйынса уҡыу- уҡытыу методик комплекты:**

Дәреслек: М.Ғ.Усманова,З.М.Ғәбитова. Башҡорт теле: Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-се класс уҡыусылары өсөн. – Өфө : Китап, 2010.

**Программа үҙенсәлектәренең характеристикаһы:**

Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған «Башҡорт теленән программа» (Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I-IX кластары өсөн) нигеҙендә төҙөлдө. Төҙөүселәре Толомбаев Х. А., Дәүләтшина М.С., Ғәбитова З. М., Усманова М. Г.,һ.б.- Ижевск:«Книгоград», 2008.

Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән программа Башҡортостан Республикаһы Бәләбәй ҡалаһы муниципаль районы «15-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе» муниципаль автономиялы дөйөм белем биреү учреждениеһының уҡыу планына ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла.

**Программаның йөкмәткеһе 3 йүнәлештә төҙөлгән:**

**-** телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу;

- тел менән әҙәби материалдары бергә ҡушып өйрәнелә (интеграция).

- лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығып өйрәнелә (коммуникатив йүнәлеш).

**Яңы стандарттар буйынса** уҡыусыларҙа лингвистик (тел), аралашыу (коммуникатив), этнокультура өлкәһенә ҡараған (культурологик) компетентлыҡ булдырыу талап ителә.

Лингвистик компетентлыҡ (уҡыусыларҙың башҡорт теленән мәғлүмәтлелеге) өндәр һәм хәрефтәрҙе, һүҙьяһалышын, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе, һүҙ төркөмдәрен, һөйләм киҫәктәрен, лексик һәм грамматик берәмектәрҙе, лингвистик анализды һ. б. үҙ эсенә ала.

Аралашыу (коммуникатив) компетентлығы — уҡығанды һәм башҡалар һөйләгәнде аңлау, хәҙерге әҙәби башҡорт теленең нормаларына эйә булыу, һүҙ байлығын, телдең грамматик яғын дөрөҫ итеп үҙләштереү, телдән һәм яҙма формала бәйләнешле телмәр күнекмәләрен булдырыу һ. б.

Этнокультура өлкәһенә ҡараған (культурологик) компетентлыҡ, йәғни телде милли-мәҙәни юҫыҡта үҙләштереү — ул уҡыусыларҙың телгә өйрәнеү барышында милли үҙенсәлектәрҙе сағылдырған текстар менән эшләүе, халҡыбыҙҙың тормош-көнкүреш, йола, ғөрөф-ғәҙәт үҙенсәлектәрен, шанлы үткәнен, әҙәп-әхлаҡ нормаларын, телмәр әҙәплелеген, һынлы сәнғәт әҫәрҙәрен, мәҙәниәтен, халыҡ ауыҙ-тел ижады үрнәктәрен белеүе, башҡорт халҡының телмәр әҙәплелеген үҙләштереүе, рухи ҡомартҡыларын ихтирам итеүе һ. б.

**Уҡыу предметы йөкмәткеһенең дөйөм ҡиммәттәргә ориентацияһы (йүнәлеше).**

Башҡорт телен өйрәнгәндә уҡыусыларҙың дөйөм телмәр үҫеше стимуляциялана; коммуникатив мәҙәниәте үҫә; дөйөм ҡиммәттәргә ориентацияһы формалаша һәм дәрестә аралашыу процесында, балалар фольклоры үрнәктәре һәм текстар менән танышҡанда әхләҡи тәрбиә нигеҙҙәре барлыҡҡа килә; сит мәҙәниәткә ҡарата толерантлыҡ формалаша.

**Уҡыу предметын өйрәнеүҙең һөҙөмтәләре.**

Башҡорт телен өйрәнеүҙең **шәхсән һөҙөмтәләренә** түбәндәгеләр инә: донъяны күп телле һәм мәҙәниәтле йәмғиәт булараҡ ҡабул итеү; үҙеңде илдең гражданины итеп тойоу; телде (шул иҫәптән башҡорт телен) төп аралашыу сараһы булараҡ ҡабул итеү; башҡорт теле саралары ярҙамында (балалар фольклоры, балалар әҙәбиәтенең ҡайһы бер үрнәктәре) уҡыусының башҡорт халҡының тормошо менән танышыуы.

**Метапредмет һөҙөмтәләр:**

уҡыусының коммуникатив һәләттәрен үҫтереү; элементар коммуникатив мәсьәләне сисеү өсөн адекват тел һәм телмәр сараларын һайлау һәләтен үҫтереү; танып белеү һәм эмоциональ сфераларын үҫтереү; башҡорт телен өйрәнеүгә мотивация булдырыу; уҡытыу-методик комплекстың төрлө компоненттары (дәреслек, аудиодиск һ.б.) менән эшләргә өйрәтеү.

**Предмет һөҙөмтәләре:**

башҡорт теле нормалары (фонетик, лексик, грамматик) тураһында белешмә; (курс йөкмәткеһе кимәлендә).

**А.** Коммуникатив сферала (башҡорт телен аралашыу сараһы булараҡ өйрәнеүҙә)

Телмәр эшмәкәрлегенең түбәндәге төрҙәрендә телмәр компетенцияһы:

**һөйләү телмәрендә:**

- аралашыуҙың типик ситуацияларында этикет диалог алып барыу;
- уҡыусының үҙе, ғаиләһе, дуҫы тураһында һөйләүе; предмет, картинаны һүрәтләүе; персонажды ҡыҫҡаса ҡылыҡһырлауы;

Тел компетенцияһы (тел сараларын үҙләштереү).

башҡорт теленең өндәрен дөрөҫ әйтеү һәм айырыу; һүҙҙәргә һәм фразаларға дөрөҫ баҫым ҡуйыу;

төрлө һөйләм төрҙәрен интонация менән уҡыу;

башланғыс мәктәп курсында өйрәнелгән уҡыу һәм орфографик ҡағиҙәләрҙеҡулланыу;тыңлап аңлауҙа:

уҡыусының уҡытыусы һәм класташтарының телмәрен тыңлап аңлауы; аудиояҙмаларҙағы текстарҙың йөкмәткеһен аңлауы;

**уҡыуҙа:**

өйрәнелгән тел материалына таянып төҙөлгән ҙур булмаған текстарҙы ҡысҡырып уҡыу;

өйрәнелгән тел материалы менән бер рәттән яңы һүҙҙәрҙе лә үҙ эсенә алған текстарҙы эстән уҡыу һәм уларҙың төп йөкмәткеһен аңлау, текстан кәрәкле информацияны табыу;

**яҙма телмәрҙә:**

яҙыу техникаһына эйә булыу;

үрнәк буйынса байрам менән ҡотлау һәм шәхси хат яҙыу.

башланғыс мәктәп курсында өйрәнелгән лексик берәмектәрҙе (һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, баһалау лексикаһы, телмәр клишелары) һәм грамматик күренештәрҙе таныу һәм телмәрҙә ҡулланыу.

Социомәҙәни компетенция.

географик атамаларҙы, билдәле балалар әҫәрҙәренең персонаждарын, популяр әкиәттәрҙең сюжеттарын, балалар фольклорының ҙур булмаған әҫәрҙәрен (шиғырҙар, йырҙар) белеү;

**Б.**Танып белеү сфераһы:

башҡорт һәм рус телдәренең күренештәрен сағыштыра белеү; өлгө буйынса күнегеүҙәр эшләй белеү; ҡағиҙәләр, таблицаларҙы ҡуллана белеү; үҙ-үҙеңде баһалай белеү;

**В.** Дөйөм ҡиммәттәргә йүнәлеш сфераһында:

башҡорт телен фекер, хис-тойғо, эмоцияларҙы белдереү сараһы булараҡ ҡабул итеү; балалар фольклоры ярҙамында башҡорт халҡының рухи ҡиммәттәрен үҙләштереү.

**Г.**Эстетик сферала:башҡорт телендәге хис-тойғо һәм эмоцияларҙы белдереүсе сараларҙы үҙләштереү; балалар әҙәбиәте өлгөләре менән танышҡанда матурлыҡты танырға өйрәнеү.

**Д.** Хеҙмәт сфераһында:уҡыу процесында билдәләнгән планға ярашлы эшләй белеү

**Башҡорт теленә өйрәтеүҙең маҡсаттары һәм бурыстары:**

- Башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли-мәҙәни ҡиммәте булараҡ аңлау, интеллектуаль, ижади һәләтлектәрен һәм шәхестең мораль-этик сифаттарын үҫтереүҙә туған телдең ролен уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү.
- Уҡыусыларҙа башҡорт телендә һөйләгәнде, уҡығанды, радио-телетапшырыуҙар тыңлағанды аңлау күнекмәләре булдырыу (аудирование).
- Башҡорт теленең өндәрен, һүҙҙәрен дөрөҫ әйтеп,үҙ-ара һөйләшергә, тәҡдим ителгән темалар, ситуациялар буйынса һөйләргә өйрәтеү.
- Башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау; телгә ҡарата ихтирам, уның менән ғорурланыу тойғоһон тәрбиәләү.
- Дәреслектәге, уҡыу ҡулланмаларындағы текстарҙы, башҡорт телендә сыға торған “Йәншишмә”, “Аҡбуҙат”, “Аманат” гәзит-журналдарын үҙ аллы һәм аңлы уҡыу күнекмәләрен биреү.
- Аралашыуҙа кәрәк була торған типик һөйләмдәрҙе күсереп,үҙ фекерҙәрен билдәле кимәлдә үҙ аллы яҙыу күнекмәләрен булдырыу.
- Башҡорт телен өйҙә, йәмғәт тормошонда, хеҙмәт процесында практик файҙаланырға өйрәтеү.

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе.**

**Һаумы, мәктәп! (8 сәғәт)**

Был тема башлыса “Көҙ” темаһы менән бергә үрелеп бара. Бер үк ваҡытта, уҡыусыларҙың йәйге каникулды нисек үткәреүе тураһында әңгәмә үткәреү, фекер алышыуҙар ойоштторола. Һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр иҫкә төшөрөлә, һүҙлек запасын байытыу йәһәтенән яңылары үҙләштерелә.Башҡорт теленең өн-хәрефтәре, ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. Исем. Исемдәрҙең һан менән үҙгәреше. Һөйләмдә һүҙ тәртибе. Сифат.

**Үҙем тураһында (8 сәғәт)**

Уҡыусы үҙе,үҙенең ғаилә ағзалары, яҡындары тураһында һөйләргә өйрәнә. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Алмаш. Зат алмаштары. Зат алмаштарының килеш менән үҙгәреше. к-г,ҡ-ғ тартынҡыларының сиратлашыуы.

**Йыл миҙгелдәре (8 сәғәт)**

Йыл миҙгелдәре, һәр йыл миҙгеленә хас үҙенсәлектәр менән танышыу. Йыл миҙгелдәрен, һәр миҙгелгә ҡараған ай исемдәрен дөрөҫ әйтә һәм телмәрҙә ҡуллана белеү. Һорау алмаштары.Күрһәтеү алмаштары. Күрһәтеү алмаштарының килеш менән үҙгәреше. Билдәһеҙлек алмаштары. Билдәләү алмаштары.

**Башҡортостанды беләһеңме? (7 сәғәт)**

Уҡыусыларҙы үҙҙәре йәшәгән республиканың үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге менән таныштырыу. Уҡыусы аңына үҙе йәшәгән ерҙең – Башҡортостандың тарихы, уның байлығы, күренекле шәхестәре һ.б. хаҡында бер бөтөн тыуҙырыу һәм ул турала һөйләй белеүҙәренә өлгәшеү. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. Юҡлыҡ алмаштары.

**Кеше. Тән ағзалары.шәхси гигиена. (6 сәғәт)**

Был тема кешенең тән ағзалары, эске органдарының атамаларын белеү менән бергә шәхси гигиена, көн тәртибе, һаулығы менән берлектә алып барыла. Кешегә һау-сәләмәт булыу өсөн нимә эшләргә кәрәклеге тураһында әңгәмәләр үткәреү, әҫәрҙәр уҡыу. Башҡорт телендә эйәлек төшөнсәһе. Ҡылым.

**Яңы йыл менән. (8 сәғәт)**

Яңы йыл темаһы ҡыш темаһы менән бергә алып барыла. Ҡыш миҙгеленең үҙенсәлектәрен билдәләү, Яңы йыл менән ҡотларға өйрәтеү, һәр байрамдың үҙенә генә хас күренештәре тураһында һөйләтеү. Ҡылымдың зат һәм һан менән үҙгәреше.

**Аҙыҡ-түлек.Кейем-һалым. Өй . Магазин. (6 сәғәт)**

Аҙыҡ-түлек, кейем-һалым атамаларын өйрәнеү, һатып алыу этикеты менән таныштырыу, аралашырға өйрәтеү. Синоним.

**8 март – Ҡатын-ҡыҙҙар көнө. (4 сәғәт)**

Әсәй тураһында шиғыр, хикәйәләр уҡыу. Әсәйҙең донъяла иң ҡаҙерле кеше икәнен, уны ихтирам итергә, яратырға, ҡаҙерләргә кәрәклекте аңлатыу. Был тема ғаилә темаһы менән берлектә бара, шуның өсөн алдағы кластарҙа үтелгән ғаилә темаһы ҡабатлана. Ҡотлау открыткалары яҙырға, ҡотлау һүҙҙәрен әйтә белергә өйрәтеү. Антоним.

**Яҙ етте. ( 6 сәғәт)**

Яҙ билдәләрен күрә һәм яҙ миҙгеленең үҙенсәлектәрен әйтә белергә өйрәтеү. 1 май, 9 май байрамдары, дуҫлыҡ тураһында һөйләшеү. Омоним.

**Яҙғы эштәр.(5 сәғәт)**

Яҙғы эштәр, яҙғы баҡса эштәре,баҫыу эштәре тураһында һөйләшеү. Һан. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

**Яҙғы байрамдар. (4 сәғәт)**

Башҡорт халҡының, Башҡортостанда йәшәүсе башҡа халыҡтарҙың яҙғы тәбиғәт менән бәйле ғөрөф-ғәҙәттәре һәм матур йолалары. Уҡыусыларға уларҙың кеше тормошондағы әһәмиәте, мәғәнәләрен, уларҙы тергеҙеү кәрәклеген еткереү. Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

**V класс уҡыусыларының белем кимәленә талаптар.**

1.Уҡытыусы уҡыған йәки һөйләгән, үҙең уҡыған тексты аңлай алыу;

- 3-6 һөйләмдән торған диалогты аңлау, уны дауам итә белеү;

2. Уҡыған әҫәр, картина, экскурсия, ҡараған фильм буйынса әңгәмәлә ҡатнашыу;

- предметты, күренеште элементар рәүештә һүрәтләү, уға үҙ мөнәсәбәтеңде булдырыу;
- хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәрҙе, поэтик әҫәрҙәрҙе дөрөҫ интонация менән һөйләү;
- 5 – 7 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү;
- тиҙәйткестәрҙе, һынамыштарҙы шыма итеп әйтә белеү.

3.Тексты  шыма, аңлы, тасуири уҡыу;

-тексттың өлөштәренә, иллюстрацияларына исем биреү;

-текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табыу, мәғәнәләрен аңлатыу, һүҙлектәр менән эш итеү;

-хикәйә, әкиәт, мәҡәл, йомаҡ жанрҙарын айыра белеү.

4. Ҙур булмаған һөйләмдәрҙе күсереп һәм яттан яҙыу;

- текст буйынса һорауҙарға яуап яҙыу;
- 6-10 һөйләмдән торған тексттың йөкмәткеһен яҙыу;

-бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү;

-өйрәтеү характерындағы изложение, иншалар яҙыу.

**Уҡыу-уҡытыу программаһында планлаштарылған һөҙөмтәләрҙе үҙләштерелеүен баһалау**

Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була. Уларға түбәндәгеләр инә:

– башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;
– тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);

– дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;
– һорауҙарға яҙма яуаптар һәм иншалар;
– тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар һ.б. төҙөү.

Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.

Уҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.

Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана. Быны өсөн башҡорт теленән һәр класта түбәндәге күләмдә контроль эштәр, яҙма эштәр үткәреү ҡарала:

**Яҙма эштәрҙең төрҙәре:**

Күсереп яҙыу-1
Һорауҙарға яуаптар-1
Диктант-4
Изложение-1
Инша-2

**Календарь-тематик планлаштырыу**

| № | Тема | сәғ. һаны | уҡыусыларҙың эшмәкәрлек төрҙәре | 5 | |
|---|---|---|---|---|---|
| **1-се сирек – 18 сәғәт** | | | | | |
| 1. | Белем көнө. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. | 1 | Дәреслек менән танышыу. Уҡытыусының һөйләгәнен тыңлау, аңлау. Башҡорт өндәрен рус телендәге өндәр менән сағыштырыу. Белем алыу темаһына ҡағылышлы һүҙҙәрҙе белеү, һөйләй алыу. Грамматика буйынса үткәндәрҙе ҡабатлау. | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 2. | Ф.Ғөбәйҙуллина. Рәйфә мәктәпкә бара. Башҡорт теленең өн һәм хәрефтәре. Алфавит. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Уҡытыусының һорауҙарын аңлап, уларға яуап биреү. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен таныу, ишетеү һәм дөрөҫ әйтә белеү. | | |
| 3. | Беҙҙең ғаилә. Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Йыл миҙгелдәрен дөрөҫ әйтеү, һүрәт буйынса һөйләү. Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡыларҙы табыу. | | |
| 4. | Мәктәп. Исем. Исемдең күплек ялғауы. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Көҙ миҙгеленең үҙенсәлектәрен билдәләү. Ниндәй? Һорауының мәғәнә үҙенсәлеген аңлау, уларға яуап биреүсе һүҙҙәрҙе таныу, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу | | |
| 5. | Беҙҙең мәктәп. Исемдең һан менән үҙгәреүе. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Уҡытыусы һөйләгәнен тыңлау, аңлау, һорауҙарына яуап биреү. Һөйләмдәр төҙөү. Исемдең күплек ялғауҙарын үҙләштереү, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу, дөрөҫ яҙыу. | | |
| 6. | Беҙҙең класс. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе ишетеү, дөрөҫ әйтеү, мәғәнәһен аңлау. Әңгәмәлә ҡатнашыу. Исемдең һан менән үҙгәрешен үҙләштереү | | |
| 7. | Дуҫтар. Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү, уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. Әңгәмәлә ҡатнашыу. Һөйләмдәр төҙөү. Да (дә), ҙа (ҙә), ла (лә), та (тә), киҫәксәләрен үҙләштереү, | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу һәм яҙыу. | | |
| 8. | **Күсереп яҙыу.** Башҡортостан.Сифат . | 1 | Һөйләмдәрҙе матур, дөрөҫ итеп күсереп яҙыу. “Башҡорт теленең үҙенсәлекле өн- хәрефтәренең дөрөҫ яҙылышы” ҡағиҙәләрен үтәү. | | |
| **Үҙем тураһында (8 сәғәт)** | | | | | |
| 9. | Танышыу. Исемдең килеш менән үҙгәреше. | 1 | Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Үҙең менән таныштыра белеү. Килеш һорауҙарының мәғәнә үҙенсәлеген аңлау, уларға яуап биреүсе һүҙҙәрҙе таныу, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу | | |
| 10. | Үҙем тураһында. Исемдең килеш менән үҙгәреше. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу.Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Һорауҙарға яуап биреү. Әңгәмәлә ҡатнашыу. | | |
| 11. | Минең әсәйем. Алмаш. Зат алмаштары. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу.Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Һорауҙарға яуап биреү. Әңгәмәлә ҡатнашыу. | | |
| 12. | Беҙҙең ғаилә. Зат алмаштарының килеш менән үҙгәреше. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. “Минең туғандарым” темаһына бәйләнешле текст төҙөү. Күплектәге исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше үҙенсәлеген аңлау. | | |
| 13 | Өләсәйгә хат яҙам. **К-г,ҡ-ғ,п-б** тартынҡыларының сиратлашыуы. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Тексты уҡыу, йөкмәткеһен аңлау. Йөкмәткеһе, һүрәттәр буйынса уҡытыусының һорауҙарына яуап биреү. Зат алмаштарын таныу, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу. К-г, ҡ-ғ, п-б өндәренең сиратлашыуын белеү | | |
| 14. | Мәҡәлдәр. ЙО-ЙӨ ижектәре. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Йо-йө ижектәрен дөрөҫ | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | әйтә һәм яҙа белеү | | |
| 15. | **Контроль диктант.**Көҙгө урман. | 1 | Һүҙҙәрҙе дөрөҫ ишетеү һәм яҙыу, үткән ҡағиҙәләрҙе үтәү. Яҙыу күнекмәләрен нығытыу | | |
| 16. | Хаталар өҫтөндә эш. М.Ғафури. | 1 | Диктантта ебәрелгән хаталарҙы аңлау һәм төҙәтеү. | | |
| | **Йыл миҙгелдәре (8 сәғәт)** | | | | |
| 17. | Был ҡайһы ваҡыт? Сифаттың исем менән ярашыуы. | **1** | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Йыл миҙгелдәрен дөрөҫ әйтеү, һорауҙарға яуап биреү. Диалогта ҡатнашыу. Сифаттың исем менән ярашыуын үҙләштереү | | |
| 18 | Көҙ көнө һауа торошо. Һорау алмаштары. | **1** | Көҙ миҙгеленең үҙенсәлектәрен билдәләү. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Һөйләмдәр төҙөү. Һорау алмаштарын таныу, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу. | | |
| | | | **2-се сирек - 16 сәғәт** | | |
| 19. | Был минең бүлмәм. Күрһәтеү алмаштары. | **1** | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Тексты тасуири уҡыу, йөкмәткеһен аңлау. Текста күрһәтеү алмаштарын табыу, дөрөҫ итеп күсереп яҙыу. | | |
| 20. | Альбинаның дуҫтары. Билдәһеҙлек һәм билдәләү алмаштары. | **1** | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Тексты уҡыу, йөкмәткеһен аңлау. Йөкмәтке буйынса һорауҙарға яуап биреү. Тема буйынса әңгәмәлә ҡатнашыу. Билдәләү һәм билдәһеҙлек алмаштарының мәғәнә үҙенсәлеген аңлау, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 21. | Дүрт теләк. Юҡлыҡ алмаштары. | **1** | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Һөйләмдәр төҙөү. Тема буйынса әңгәмәлә ҡатнашыу. Тексты уҡыу, йөкмәткеһен аңлау. Юҡлыҡ алмаштарының мәғәнә үҙенсәлеген аңлау ,телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу | | |
| 22. | Инша. Алтын көҙ. | **1** | Үҙ аллы эшләү. Фекерләргә өйрәтеү. Уларҙы эҙмә-эҙлекле рәүештә яҙыу. | | |
| 23. | Хаталар өҫтөндә эш. Г.Ситдикова.Төҫлө ҡәләмдәрем. Алмаш | **1** | Контроль эштә ебәрелгән хаталарҙы аңлау һәм төҙәтеү Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. | | |
| 24. | **Уҡыу техникаһын тикшереү.** Яратҡан миҙгелем. Алмаш | **1** | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Уҡытыусының һөйләгәнен тыңлау, аңлау, һорауҙарына яуап биреү. Диалогта ҡатнашыу. Алмаштарҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу | | |
| 25. | Урал – башҡорт иле. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Тексты уҡыу, йөкмәткеһен аңлау. Йөкмәтке буйынса һорауҙарға яуап биреү. Тыуған ил, тыуған ер тураһында мәҡәлдәр табыу. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе текста табыу, дөрөҫ яҙыу. | | |
| 26. | Башҡортостан флагы. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. | 1 | Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Уҡытыусы һөйләгәнен тыңлау. Әңгәмәлә ҡатнашыу. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәргә миҫалдар табыу, дөрөҫ итеп яҙыу. | | |
| 27. | Салауат Юлаев һәйкәле. Һөйләм төҙөлөшөн | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | ҡабатлау. | | һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Тексты уҡыу, йөкмәткеһен аңлау. Йөкмәтке буйынса уҡытыусының һорауҙарына яуап биреү. Һөйләмдә һөйләм киҫәктәренең тәғәйен урыны булыуын үҙләштереү. | | |
| 28. | **Изложение.** Аҡыллы турғай. | **1** | Әкиәтте уҡыу, йөкмәткеһен аңлау. Йөкмәтке, һүрәт буйынса уҡытыусының һорауҙарына яуап биреү. Әкиәт буйынса изложение яҙыу. | | |
| 29. | Башҡортостан байлыҡтары. Һорау һөйләмдәр. | **1** | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Тексты уҡыу, йөкмәткеһен аңлау. Йөкмәтке буйынса уҡытыусының һорауҙарына яуап биреү. Уҡыу һәм яҙыу күнекмәләрен нығытыу. Интонация буйынса бүленгән һөйләм төрҙәренә миҫалдар килтереү, уларҙы текстан табыу. | | |
| 30. | Тәбиғәтте һаҡлайыҡ! | **1** | Һүҙҙәрҙе дөрөҫ ишетеү һәм яҙыу, үткән ҡағиҙәләрҙе үтәү. Яҙыу күнекмәләрен нығытыу. | | |
| 31. | Өфө - Башҡортостандың баш ҡалаһы. | **1** | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Тексты уҡыу, йөкмәткеһен аңлау. Тема буйынса уҡытыусының һорауҙарына яуап биреү. Башҡортса һанай белеү. | | |
| 32. | Тән ағзалары. Башҡорт телендә эйәлек төшөнсәһе. | **1** | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Тән өлөштәрен атай белеү. Эйәлек төшөнсәһен үҙләштереү, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу. | | |
| 33 | Шәхси гигиена. Башҡорт телендә эйәлек төшөнсәһе. | **1** | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Шиғырҙы тасуири уҡыу, йөкмәткеһен аңлау, һорауҙарға яуап биреү. Гигиена | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | ҡағиҙәләрен үтәү. Эйәлек килеш ялғауҙарын үҙләштереү, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу. | | |
| 34 | Табипта. Эйәлек төшөнсәһе. | **1** | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Тексты уҡыу, йөкмәткеһен үҙләштереү. | | |
| | | | | | |
| 35 | Кем нимә эшләй? Ҡылым. | 1 | Уҡытысы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Тема буйынса әңгәмәлә ҡатнашыу. Һорау һөйләмдәр төҙөү, уларҙы дөрөҫ интонация менән уҡыу. | | |
| 36 | Дарыу үләндәре. Ҡылым. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Тексты уҡыу, йөкмәткеһен аңлау. Ҡылым һөйкәлештәрен үҙләштереү. Ҡылымдың бойороҡ һөйкәлеше мәғәнәһен үҙләштереү, миҫалдар килтереү. | | |
| 37 | **Диктант.** Декабрҙә. | 1 | Һүҙҙәрҙе дөрөҫ ишетеү һәм яҙыу, үткән ҡағиҙәләрҙе үтәү. Яҙыу күнекмәләрен нығытыу. | | |
| 38. | Башҡортостанда ҡыш. Һөйләмдә һүҙ тәртибе. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Ҡыш миҙгеленең үҙенсәлектәрен билдәләү. Һүрәттәр буйынса һөйләмдәр төҙөү. Исемдең күплек ялғауҙарын үҙләштереү ,телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу. | | |
| 39. | Һорауҙарға яуап. Ҡышҡы уйындар. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Тексты уҡыу, | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | йөкмәткеһен аңлау. Ҡылымдың 3-сө зат ялғауҙарын үҙләштереү, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу | | |
| 40. | Ҡоштарға ярҙам. Ҡылым | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Башҡортостан ҡоштарын таныу, уларға ярҙам итергә кәрәклеккә төшөнөү. Һөйләмдә һүҙҙәрҙең килеү тәртибен үҙләштереү. | | |
| 41. | Яуа ҡарҙар. Ҡылымдарҙың зат һәм һан менән үҙгәреше. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Тексты уҡыу, йөкмәткеһен үҙләштереү. Ҡылымдың 3-сө зат ялғауҙарын үҙләштереү телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу. | | |
| 42. | Яңы йыл ҡайҙа нисек үтә? Ҡылымдарҙың зат һәм һан менән үҙгәреше. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Тексты уҡыу, йөкмәткеһен аңлау. Уҡытыусы һөйләгәнен тыңлау, аңлау. Тексттың йөкмәткеһе буйынса һорауҙарға яуап биреү. Ҡылымдың һан менән үҙгәрешен үҙләштереү, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу. | | |
| 43 | **Экскурсия.** Ергә аҡ ҡарҙан юрған ябылған. | 1 | Ҡышҡы тәбиғәткә күҙәтеү яһау. Ҡышҡы уйындар уйнау | | |
| 44 | **Инша.** Ҡышҡы матурлыҡ. | 1 | Үҙ аллы эшләү. Фекерләргә өйрәтеү. Уларҙы эҙмә-эҙлекле рәүештә яҙыу. | | |
| 45 | Хаталар өҫтөндә эш. Ҡар өй. Ғинуар. | 1 | Контроль эштә ебәрелгән хаталарҙы аңлау һәм төҙәтеү. Уҡытыусы һөйләгәнен тыңлау, аңлау. Әңгәмәлә ҡатнашыу. Ҡылымдың 2-се зат ялғауҙарын үҙләштереү, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу. | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 46. | Аҙыҡ-түлек. Синонимдар. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Уҡытыусы уҡыған йомаҡты аңлау. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен ишетеү, таныу, дөрөҫ әйтә һәм яҙа белеү. Икмәк тураһында мәҡәлдәр табыу. | | |
| 47. | Кейем-һалым. Синонимдар. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Тесты тасуири уҡыу, йөкмәткеһен үҙләштереү. Йөкмәтке буйынса һорауҙарға яуап биреү. Һүрәттәр буйынса һөйләмдәр төҙөү. Синонимдарҙы үҙләштереү, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланырға өйрәнеү. | | |
| 48. | Магазинда. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Уҡытыусы һөйләгәнен тыңлау, аңлау, һорауҙарына яуап биреү. Әңгәмәлә ҡатнашыу, диалог төҙөү. | | |
| 49. | Мул уңыш үҫтерәбеҙ. Ҡылым. | 1 | Баҡса тотоу, баҡсасы хеҙмәтенә ҡағылышлы һүҙҙәрҙе белеү.Баҡсала нимә үҫтереп булыуы, баҡса тотоуҙың файҙаһы тураһында һөйләй белеү | | |
| 50. | **Контроль диктант.** Яҙ килә. | 1 | Һүҙҙәрҙе дөрөҫ ишетеү һәм яҙыу, үткән ҡағиҙәләрҙе үтәү. Яҙыу күнекмәләрен нығытыу. | | |
| 51. | Хаталар өҫтөндә эш. Ҡымыҙ – файҙалы эсемлек. | 1 | Диктантта ебәрелгән хаталарҙы аңлау һәм төҙәтеү. | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 52. | 8 март – ҡатын ҡыҙҙар көнө. Антонимдар. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Тексты тасуири уҡыу, йөкмәткеһен аңлау. Антонимдарҙы үҙләштереү, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу | | |
| 53. | Минең әсәйем. Интонация буйынса һөйләм төрҙәре. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Шиғырҙы тасуири уҡыу, йөкмәткеһен аңлау, һорауҙарға яуап биреү. Һөйләм төҙөү. | | |
| 54. | Беҙҙең ғаилә. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Диалогты уҡыу, йөкмәткеһен аңлау. Йөкмәтке буйынса уҡытыусы биргән һорауҙарға яуап биреү. Күплек ялғауҙарын үҙләштереү, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу. | | |
| 55. | Эш бөткәс, уйнарға ярай. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Уҡытыусы һөйләгәнен тыңлау, аңлау, һорауҙарына яуап биреү. | | |
| | | | | | |
| 56. | Яҙ килә. Омонимдар. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Уҡытыусы һөйләгәнен тыңлау, аңлау, һорауҙарына яуап биреү. Омонимдарҙы үҙләштереү, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу, һөйләмдәр төҙөү. | | |
| 57. | Башҡортостанда яҙ. Синонимдар. Антонимдар. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Яҙ миҙгеленең үҙенсәлектәрен билдәләү. Һүрәт буйынса һөйләү. | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | Омонимдарҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу. | | |
| 58. | Ҡайтығыҙ ҡоштарым! Зат алмаштары. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Башҡортостан ҡоштарын таныу, уларға ярҙам итергә кәрәклеккә төшөнөү. Алмаштарҙы телмәрҙә ҡулланырға өйрәтеү, уларҙы текста табыу. | | |
| 59 | 1 май – яҙ байрамы. | | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Тексты уҡыу, йөкмәткеһен үҙләштереү. | | |
| 60. | 9 май – Еңеү байрамы. Кем?Нимә? һорауҙары. | 1 | Еңеү көнө, атай-олатайҙарҙың батырлығы, һуғыш килтергән ауырлыҡтар тураһында әңгәмәләшеү. Һорауҙарға дөрөҫ итеп яуа бирә белеү | | |
| 61 | **Экскурсия.** Яҙ етте. | 1 | Яҙ, йәй ваҡытында ҡояшлы көндәрҙең һаулыҡ өсөн файҙалы булыуы хаҡында һөйләшеү. Яҙғы тәбиғәтте күҙәтеү. | | |
| 62. | Баҡса эштәре.**ЙЫ,ЙЕ,ЙО, ЙӨ,ЙҮ**ҡушымсалары. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Һүрәттәр буйынса һөйләмдәр төҙөү. Шиғырҙы тасуири уҡыу, йөкмәткеһен үҙләштереү. Йы, йе, йо, йө, йү хәреф ҡушымсаларын үҙләштереү, дөрөҫ яҙыу. | | |
| 63. | Суфия – яҡшы табип. Һан. | 1 | Ябай һәм ҡушма һандарҙы үҙләштереү, телмәрҙә ҡулланыу һәм дөрөҫ яҙыу. Һандарҙы телмәрҙә ҡулланыу һәм дөрөҫ яҙыу. | | |
| 64 | Яҙғы эштәр. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Шиғырҙы тасуири уҡыу, йөкмәткеһен үҙләштереү. Ябай һәм ҡушма һандарҙы үҙләштереү, телмәрҙә ҡулланыу һәм дөрөҫ яҙыу. | | |
| 65. | **Контроль диктант.** Яңғыҙ ҡайын. | 1 | Һүҙҙәрҙе дөрөҫ ишетеү һәм яҙыу. Йыл буйына үткән ҡағиҙәләрҙе үтәү. Яҙыу күнекмәләрен нығытыу. | | |
| 66. | Хаталар өҫтөндә эш. Алмаш. Яҙғы сәскәләр. | 1 | Диктантта ебәрелгән хаталарҙы аңлау һәм төҙәтеү. Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. тексты уҡыу, йөкмәткеһен үҙләштереү, һорауҙарға яуап биреү. Тема буйынса һүрәттәр төшөрөү. | | |
| 67. | Яҙғы байрамдар. Алмаш (ҡабатлау). | 1 | Әңгәмәлә ҡатнашыу. Һөйләмдә һүҙҙәрҙең килеү тәртибен үҙләштереү. Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. | | |
| 68. | Уҡыу техникаһын тикшереү. Йәй айҙары. | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Уҡытыусы һөйләгәнен тыңлау, аңлау. Тексты уҡыу, йөкмәткеһе буйынса һорауҙарға яуап биреү. Һүҙ төркөмдәрен айырырға өйрәнеү, уларҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу. | | |
| 69. | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 1 | Уҡытыусы ярҙамында дәрестең маҡсатын билдәләүҙә ҡатнашыу. Темаға ярашлы яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Уҡытыусы һөйләгәнен тыңлау, аңлау, һорауҙарын яуап биреү. Тексты уҡыу, йөкмәткеһе үҙләштереү. Һүрәт буйынса һөйләмдәр төҙөү. Тема буйынса һүрәттәр төшөрөү. | | |
| 70. | Тәбиғәткә экскурсия | 1 | Тышта уйындар уйнау | | |

**Башҡорт телен өйрәнеү өсөн уҡыу - уҡытыу методик ҡулланмалар.**

1. Башҡорт теленән программа. (Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең I – XI кластары өсөн). Төҙөүселәре: Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. – Ижевск: «КнигоГрад», 2008.
2. Башҡорт теленән диктанттар һәм изложениелар йыйынтығы. Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. – Өфө: Китап, 2009.
3. Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 7-8-се кластары өсөн «Башҡорт теле» дәреслегенә методик күрһәтмәләр. Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. – Өфө: Китап, 2006.
4. Ғәбитова З.М. Телмәр үҫтереү дәрестәре. Башҡорт телен дәүләт теле итеп өйрәнеүселәр өсөн. – Өфө: Китап, 2009.
5. Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙә башҡорт теле буйынса уҡыусыларҙың телмәр үҫтереүенә, яҙма эштәренә, дәфтәр тотоуҙарына һәм яҙма эштәр үткәреүгә берҙәм талаптар. (Протокол №4, 13 ғинуар 2010 йыл)
6. Усманова М. Г. Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа һәм схемаларҙа.
7. Аслаев Т. Х., Атнағолова С.В. Телмәр үҫтереү буйынса сюжетлы картиналар.-Өфө:Китап, 1996.
8. Башҡорт әҙәбиәте буйынса аудио-видео әсбаптар.- Өфө: Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы. 2005.
9. Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа. Фонетика. Морфология. - Башҡортостандың бәләкәй даһийы. Өфө : «Эдвис» уҡытыу – методика үҙәге, 2008.
10. Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге. Ураҡсин З.Г. – Өфө, 2004.
11. Русса-башҡортса һүҙлек. Ураҡсин З.Г., Саяхова К.Г. – Өфө, 1997.
12. Омонимдар һүҙлеге. Әхтәмов М.Х. – Өфө, Китап, 2006.
13. Башҡорт теленең фразеологик һүҙлеге. Ураҡсин З.Г. – Өфө, Китап, 2006.
14. Башҡортостан энциклопедияһы. Шәкүров Р.З. – Өфө, Китап, 1997.
15. Балалар әҙәбиәте антологияһы. Әлибаев С. – Өфө, Китап, 1999.
16. Электрон дәреслек. Башҡорт (дәүләт) теле. 5-11 – Өфө: Мәғариф министрлығы, 2003.

17. Электрон дәреслек. Башҡорт әҙәбиәте. 5-9 класс – Өфө: Мәғариф министрлығы, 2003.
18. Раҡаева Ә.С., Дәүләтшина М.С. Башҡорт теленән контроль һорауҙар, тестар ҡулланмаһы. – Өфө: Педкнига, 2008.
19. Башҡорт теле таблицаларҙа, схемаларҙа һәм ҡағиҙәләрҙә. Әүбәкирова З.Ф.– Өфө, 2006.

**Материаль-техник ҡулланмалар**

- телевизор;
- магнитофон, музыкаль үҙәк
- компьютер;
- принтер;
- DVD-проигрыватель.

**Төп һәм өҫтәлмә әҙәбиәт**

1.З.М.Ғәбитова, М.Ғ.Усманова. Башҡорт теле: Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-се класы уҡыусылары өсөн дәреслек. – Өфө : Китап, 2010.
2.З.М.Ғәбитова, Х.А.Толомбаев.Рус мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыуҙы ойоштороу буйынса методик кәңәштәр.Өфө – 2006.
3.М.Ғ.Усманова, З.М.Ғәбитова. Башҡорт теленән диктант һәм изложениелар йыйынтығы. Өфө – Китап – 2009.
4.Ғәбитова З.М. Телмәр үҫтереү дәрестәре. – Өфө: Китап, 2009.
5.Башҡортса – русса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге. – Өфө: Китап, 1994.
6.Әүбәкирова З.Ф., Әүбәкирова Х.Е., Дилмөхәмәтов М.И. Мин башҡортса уҡыйым – Өфө: Китап, 2007.
7.Башҡорт теле таблицаларҙа, схемаларҙа һәм ҡағиҙәләрҙә. Әүбәкирова З.Ф.– Өфө, 2006.
8.Тел төҙәткестәр, тиҙәйткестәр, һанамыштар. Төҙөүселәр: Иҫәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.
9.Журналдар: «Башҡортостан уҡытыусыһы», «Аҡбуҙат», «Аманат».
10.Ял минуттары өсөн күнегеүҙәр. Методик ҡулланма. Төҙөүселәр: Иҫәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.
11.М.В.Зәйнуллин. Хәҙерге башҡорт теле.Морфология. - Өфө: Китап, 2005.
12.Толомбаев Х.А., Ғәбитова З.М. Башҡорт теленән тестар. - Өфө: 2005
13.Русско-башкирский учебный словарь.Саяхова Л.Г., Ураксин З.Г. - Уфа: Китап, 2001

**Интернет- ресурстар**

1"Башкирский Язык" - Хисамитдинова Ф.Гhttp://www.gsrb.ru/
2. Официальный сайт курултаяhttp://www.bashnl.ru
3.сайт национальной библиотеки им.Валидиhttp://ostaz.ru
4.сайт для учителей башкирского языка http://www.bashforu m.net
5.Башҡорт форумдары http://www.bash-portal.ru/
6. башкирский http://www.yeshlek-gazeta.ru
7.сайт газеты Йэшлек http://tel.bashqort.com
8.Сайт изучения башкирского языка http://tugantel.ru

# Ҡушымта

**Ҡабатлау өсөн һорауҙар**

1. Һеҙҙең ғаиләлә кемдәр бар?
2. Һеҙ ҡайҙа йәшәйһегеҙ?
3. Ғаиләлә кем ҡайҙа эшләй?
4. Һинең төп эшең нимә?
5. “Икмәк - байлыҡ” (Хлеб - богатство) тигән мәҡәлде нисек аңлайһың?
6. Эшҡыуарҙар хикәйәһендә ниндәй һөнәр тураһында әйтелә?
7. Диктор ниндәй эш башҡара?

**Күсереп яҙыу өсөн текстар**

**Башҡортостан**

Беҙ Башҡортостан тураһында кино ҡараныҡ. Республикабыҙҙың киң ҡырҙарын, ҡалын урмандарын, бейек тауҙарын күрҙек. Һыҙылып аҡҡан Ағиҙел, Ҡариҙел, Һаҡмар, Дим йылғаларына һоҡландыҡ.
Бына Өфө ҡалаһы. Уның киң урамдарында трамвайҙар, автобустар һәм троллейбустар, машиналар йөрөй. Халыҡ та бик күп. Туғыҙ һәм ун ике этажлы өйҙәр, театрҙар, музейҙар, төрлө һәйкәлдәр, фабрикалар, нефть эшкәртеү заводтары Өфөлә бик күп. Картина беҙгә бик оҡшаны.

**Әсә йыры**

Минең донъяла башлап күргән нәмәм, башлап тойған нәмәм – әсәйемдеү йөҙө, уның йыры.

Әсә йыры – донъялағы иң бөйөк йыр. Ҡалған башҡа йырҙар ҙа шул йырҙан башлана. Әгәр ҙә сәңгелдәк йыры булмаһа, моғайын, башҡа йырҙар ҙа булмаç ине. Ул ваҡытта донъялағы бәхетте лә, шатлыҡты ла кеше тулыһынса аңламаç ине. Ул ваҡытта донъялағы бәхетте лә. Шатлыҡты ла кеше тулыһынса аңламаç ине. Беҙ әсә йырын оҙаҡ йылдар үткәс тә иçкә төшөрәбеҙ. Тормошобоҙҙоң ауыр һәм бәхетле көндәрендә лә әсәй йыры беҙҙең менән. ( Ғ. Рамазановтан.)

## Диктанттар

### Көҙгө урман

Көҙгө урманда йөрөргә яратам. Уның иң матур сағы сентябрь бөткәндә булалыр.Зәңгәр күккә, йылы аяҙ көнгә, урмандың төрлө биҙәктәренәһоҡланып туя алмайһың. Тәрән тынлыҡ.Әкрен генә йылы ел иçә.Ағастарҙан һап-һары япраҡтарҙың ҡойолғаны ишетелеп ҡуя. Аяҡтарыңды ергә түшәлгән алтын япраҡ иркәләй (43 һүҙ)

### Декабрҙә

Декабрь – ҡыштың тәүге айы. Декабрҙә йыш ҡына ҡар яуа. Ҡаты һыуыҡтар башлана. Йәнлектәр һәм ҡоштар ҙур ҡыйынлыҡ кисерә. Мышылар мөгөҙҙәрен ташлай. Төлкөләр ҡуян эҙенән ҡыҙыралар һәм сысҡан эҙләйҙәр. Декабрҙә көндәрҙең иң ҡыçҡа һәм төндәрҙең иң оҙон ваҡыты. (37 һүҙ).

### Яҙ килә

Яҙ килә. Көндәр йылына башланы. Ҡояш йылмая. Ҡар ирей. Ул көндән-көн йоҡара бара. Ҡыйыҡтан тамсылар тама. Шулай ҙа кискә ҡарай көн һыуыта. Тамсылар ҙа таммай башлай. Иртән тағы ҡояш сығыр, матур яҙғы көн ҡабатланыр. Тиҙҙән йылы яҡтан ҡоштар ҡайтыр. (40 һүҙ).

### Яңғыҙ ҡайын

Бына, көтә торғас, көндәр ҙә йылына башланы. Ҡарҙар ереп, һыуҙар ташты. Ҡайынға ла йән инде. Тамырҙан күтәрелгән татлы һуттан һәр бөрө хәрәкәткә килде.Ҡайын бер кемдән дә бөрөһөн йәлләмәне:улар бик файҙалы бит. Көндәр үтә торҙо. Ҡайын аҡ зифа буйлы, йәшел күлдәкле матур ағасҡа әйләнде.(47 һүҙ)

## Изложение

### Аҡыллы турғай

Бесәй ауға сыҡҡан. Ул ағастың иң юғары ботағында ултырған бер турғайҙы күреп ҡалған. Мыраубикә турғайға ҡарап торған да:
-Турғай дуҫ, бында төш. Ерҙә һәйбәтерәк бит, тигән.
Турғай бесәйҙең хәйләһен тиҙ аңлап алғанһәм былай тип яуап биргән:
-Юҡ, бесәй дуҫ, бейектә һәйбәтерәк. Мин бынан бөтәһен дә күреп торам.
-Хәҙер бына нимә күрәһең? – тип һораған бесәй турғай ҙан.
-Был яҡҡа эттәр килә.
Ошо һүҙҙәрҙе ишеткәс тә, бесәй табанын ялтыратҡан.

**Яҙма эштәр**

1.Һөйләмдәрҙе дөрөҫ итеп төҙөгөҙ.
Мин, барҙым , киноға.
Гөлназ, яҙа, дәфтәргә.
Әсәй, ҡоя, ҡоймаҡ.

2.Диалогты башҡортсаға тәржемә итегеҙ.
-Һаумыһығыҙ!
-Һеҙҙә ҡаймаҡ бармы?
-Миңә,зинһар, бер ҡаймаҡ,
бер ҡап печенье бирегеҙ.
- Нисә һум түләргә?
-Һеҙҙән алтмыш ете һум.
-Рәхмәт.Һау булығыҙ.

3.Башҡортсаға тәржемә итегеҙ.
15 яблок
23 ученика
11 классов
3 этажа
17 лет

4.Нөктәләр урынына тейешле хәрефтәрҙе ҡуйығыҙ.
Һиге…, ту…ыҙ, ег…рме, ҡы…ҡ,туҡ…ан, й…ҙ, ме…,

ил…е биш, м…ң а…ты йө…
5. Һандарҙа һүҙҙәр менән яҙығыҙ.
29, 96, 184, 111, 3445, 2014, 2000

**Беҙҙең ғаилә.**

Минең исемем ______, фамилиям _______. Миңә ___ йәш. Мин ______ _____ йәшәйем. Беҙҙең ғаиләлә ___кеше: _____, ______, ______.Атайымдың исеме ____. Уға ____ йәш. Ул ____ ____ булып эшләй. Әсәйемдең исеме ____. Уға ___ йәш. Ул _____ _____ булып эшләй.Олатайымдың (өләсәйемдең) исеме _____. Уға ___ йәш. Апайымдың (ағайымдың, ҡустымдың, һеңлемдең) исеме ____ . Уға ___ йәш. Ул ___ -се мәктәптә ___ класта уҡый.
Мин ғаиләмде бик яратам, барыһына ла ____, _____ теләйем.